*Гүзәл СИТДИҠОВА,
Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы —
Ҡоролтайҙың Закондар сығарыу Палатаһы депутаты*

# Йүкәләрҙән балдар тама ине

## (Саксония юлъяҙмалары)

**Беренсе тәүлек**

Башҡортостаныбыҙ бер нисә сәғәт элек кенә беҙҙе, Дәүләт Йыйылышының туғыҙ депутатын һәм тәржемәсебеҙҙе, салт ҡояшы менән оҙатып ҡалғайны, Берлин шәмәреп ҡаршыланы. Тик Ирекле Саксония иле Ландтагының (парламентының) протокол бүлеге хеҙмәткәре һәм тәржемәсеһе урыҫ милләтле Зояның ихлас йөҙҙәре, сәләмләүҙәре хатта һауа торошон үҙгәртеп ебәргәндәй булды.

Автобус өҫтәл кеүек тигеҙ юлдан елдергәндә, тәрбиәләп тотолғаны күҙгә ташланып торған урмандарына, игендәре сайҡалып ултырған яландарына, бесән бакуйҙарына һәм кескәй генә ҡаласыҡтар рәүешле ауылдарына һоҡланып ҡарап барҙыҡ. Бесәне инде йыйылып, пресланып, ҙур-ҙур мискәләр кеүек тәгәрәтеп һалып ҡуйылған яландар ҙа аҙ түгел.

Юл ҡырҙарында һырлы таҡтанан яһалған бейек оҙон ҡоймалар осрай — баҡһаң, ауылдарға транспорт тауышы ишетелмәһен өсөн шундай ҡоролмалар эшләнгән икән. Трассаның буйынан-буйына ҙур өйөрөлтмәктәр беркетеүле аҡ көмөшһыу бағаналар теҙелеп киткән — экологик яҡтан зарарһыҙ һәм шул ваҡытта ифрат арзан энергия биреүсе ел электростанциялары бына шундай була икән.

Бер аҙҙан ямғыр һибәләргә тотондо һәм шунлыҡтан беҙ барып ингәндә Саксонияның баш ҡалаһы Дрездендың да сырайы ҡараңғы кеүек тойолдо. Йылдар туҙанын, ыҫ һеңдереп, аяҙҙа ла ҡарағусҡыллатып торған готик ҡоролмалар, уларҙың осло башлы архитектура биҙәктәре һүрәттәрҙән күргәндә үк күңелгә бик ятмағайны, ысынбарлыҡта мин уйлағандан шәберәк түгел икән.

«Гевандһаус» тип аталған ҡунаҡханала нәүбәтсе егет урыҫса беләә булып сыҡты — ата-әсәһе бер нисә йыл элек бында күсеп килгән икән. Унын ихласлығы, һәр һорауға иғтибарлы була белеүе ятһыныу тойғоһон әллә ҡайҙа итте, күңел урынына ултыра төштө.

Ә кис ҡунаҡхана кафеһына йыйылғас, минең тыуған көндө иҫкә төшөрҙөләр. Ай-вайыма ҡуймай түргә ултыртып, ҡотлау һүҙҙәре яуҙыра башланылар. Юлға алған күстәнәстәрем алмандарға оҡшаны булһа кәрәк. Яуап һүҙе итеп башҡортса шиғыр уҡыным. Ҡыҙыҡ, бөгөнгәсә бында башҡортса шиғыр яңғыраған булдымы

икән? Үҙем өсөн ифрат күренекле ваҡиға кеүек тойолдо ошо кис — ғүмерҙә бер генә булалыр ул тыуған көнөңдө сит илдә, сит милләт кешеләре араһында үткәреү, етмәһә, уларға үҙ телеңдән яңғырашын ишеттереү! Был алман кешеләре менән кем икәнде лә онотор, ә бер башҡорт ҡатыны ошонда тыуған көн үткәргәне барыбер иҫтәрендә ҡалыр.

«Һәр кешенең — үҙ Ҡояшы, һәр кешенең — үҙ Айы» тип тамамланған шиғырымды һөйләп бөткәс:

— Айыбыҙ-Ҡояшыбыҙ кешелеккә, илдәребеҙгә, милләттәребеҙгә һәм һәр беребеҙгә мәрхәмәтлек күрһәтһен, тик бәхетле дәүерҙәр шаһиты ғына булһын һәм уларҙы бер ҡасан да дошманлыҡ болоттары ҡапламаһын, — тип өҫтәнем.

**Икенсе тәүлек**

Иртәгеһен эш көнөн Ландтагтан башланыҡ. Ғәжәп, бында һаҡ-маҙар ҡуйылмаған: теләгән кеше инә, икенсе ҡатындағы ресторанында тамаҡ ялғап сыға ала (АҠШ-тағы теракттан һуң хәл үҙгәргәндер инде). Ландтаг президенты Эрих Ильтген әфәнде быны демократия ҡаҙанышы тип баһаланы. Ул пресс-конференциялар залында парламент фракциялары, фирҡәләр башлыҡтары менән берлектә беҙҙе ҡыҙыҡһындырған һәммә һорауҙарға яуап бирҙе, депутаттар эшмәкәрлеге менән таныштырҙы.

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттарынан торған делегациябыҙ башлығы, Закондар сығарыу Палатаһы рәйесе Фәнис Садиҡ улы Әмеров Ландтаг ҡунаҡтары кенәгәһенә сәләмләү һүҙҙәре яҙып ҡалдырҙы. Ябай ғәмәл кеүек тойолһа ла, был да ике ил парламенты бәйләнештәрен тарихта теркәп ҡалдырыусы бер документ бит ул.

* * *

*Белешмә өсөн:*

Саксония Ландтагы, халыҡ тарафынан туранан-тура һайланған берҙән-бер конституцион орган булараҡ, Ерҙәң (Германияла федерацияға ингән субъекттар урыҫсалап әйткәндә Земля тип атала — ғәмәлдә ул үҙаллы ил) иң юғары власы вәкәләтенә эйә. Тимәк, парламент башлығы Ландтаг рәйесе генә түгел — Саксонияла беренсе дәрәжә тотҡан етәксе.

Президенттың ике урынбаҫары вазифаларын ҡатындар биләүе һөйөндөрҙө. Европа Европа инде! Беренсе вице-президент Андреа Домбоис менән киске ашта ултырҙаш булырға ла тура килде — ифрат ябай, алсаҡ ҡатын.

Ландтаг эшенә төп йүнәлеш биреүсе һәм етәксе орган — Президиум, ул үрҙә атап киткән етәкселәрҙән тыш үҙ эсенә фракциялар һаны буйынса 13 депутатты ла ала. Ландтагта 120 депутат, уларҙың 60-ы һайлау округтары тәҡдиме менән, ҡалғаны фирҡәләр исемлеге буйынса һайланған. Һуңғы һайлау 1999 йылдың сентябрендә уҙғарылып, тауыш биреүселәрҙең яртыһынан күбеһе ХДС (Христиан-демократик союз) ағзаларына ышаныс белдерһә, Демократик социализм партияһы Ландтагҡа 30 кешеһен (22,2 проц.) үткәрә алған, Социал-демократик партиянан — бары 14 кеше. Парламентҡа үтә алһын өсөн фирҡәләр кәмендә 5 процент тауыш йыйырға тейеш. Депутаттарҙың яртыһы тирлек нәфис заттан.

Рәсәй Дәүләт Думаһындағы кеүек үк, партиялар Ландтагта ла алты кешенән кәм булмаған фракция төҙөй ала.Әйтергә кәрәк, Ландтаг эшенә лә, йәмғәтселек фекеренә лә улар ифрат көслө йоғонто яһай һәм күп кенә вәкәләттәргә эйә.

Саксония парламентында 13 даими комиссия төҙөлгән. Хөкүмәтте, премьер-министрҙы, Конституцион суд ағзаларын һайлау — иң юғары власть органы булараҡ, Ландтаг бурысы. Хөкүмәт тап уның алдында башҡарылған эштәр өсөн иҫәп-хисап бирә, яуап тота.

Германияның Төп Законына ярашлы, Ерҙәң үҙенә генә тапшырылған идара итеү даирәләре бар. Улар иҫәбенә мәктәптәр һәм юғары уҡыу йорттары эшмәкәрлеге; матбуғат һәм радио; полиция хоҡуғы һәм төҙөлөш надзоры; урындағы үҙида-

ра һәм дәүләт муниципаль ойошмалары хоҡуҡтары мәсьәләләре инә. Ошо йүнәлештә улар закондар ҡабул итә һәм үҙ сәйәсәтен үткәрә ала. Үҙәк рөхсәте менән федераль закондар буйынса ла ниндәйҙер ҡарарҙар ҡабул итеү хоҡуғы бирелгән.

* * *

Президент, дәрәжәмде төшөрәмдер-фәлән тип торманы, парламент бинаһы буйлап экскурсияны үҙе үткәрҙе. Ул ифрат көләкәс, мәрәкәләй белгән кеше булып сыҡты. Был сифат алмандарҙа юғары баһаланалыр, моғайын, сөнки ултырыштар залына инер ерҙә галстугы ҡыйшайған, ҡорһағы бүҫелә яҙып салбар ҡайышының өҫтөнә һәленеп төшкән, ҡулын кеҫәһенә тығып фырт ҡына баҫып торған кәрлә һын күреп рәхәтләнеп көлөштөк — депутаттарға карикатура икән әлеге шаян скульптура. Мин уның муйынынан ҡосаҡлап иҫтәлеккә фотоға төштөм.

Ултырыштар залының икенсе ҡатына үтәбеҙ. Ул беҙҙәге кеүек үк төрлө ижтимағи саралар үткәреү өсөн дә файҙаланыла. Был көндө инвалидтар ойошмалары ниндәйҙер ултырыш үткәрә ине. Теләгән кешеләр, шулай уҡ журналистар өҫкө ҡаттан эш барышын күҙәтә, телевидениеға төшөрә.

Ә беҙ ҡала менән танышырға юлландыҡ. Тәржемәсе Зоя Саксония короле Көслө Август тураһында һөйләне. «Ниндәй сифаты өсөн шундай ҡушамат биргәндәр, холҡона ҡарапмы, әллә ил өсөн ҡылған хеҙмәттәре өсөнмө?» — тип һорағайным да, уның физик яҡтан көслөлөгө күҙҙә тотолған икән. Ғәйрәтле лә булған шул үҙе — яр буйындағы тимер парапетта бер уйым бар, Август бармағы менән ҡалын тимерҙе шулай батырып бөткән, тиҙәр. Тимер таяҡтарҙы балауыҙ кеүек кенә бөккән. Ҡатындары, кәнизәктәре лә солтандарҙыҡынан ҡайтыш булмаған, имеш.

Тар ғына боронғо текә урамдарҙан яңынан аяҡҡа баҫтырылырға тейешле Фрауенкирхе сиркәүенә юлланабыҙ. Германияла ер майҙандары әҙ, етмәһә, ҡыйбат булғанлыҡтан, уның һәр метрын табыш бирерлек итеп файҙаланырға тырышыуҙары күренеп тора.

Велосипед менән йөрөүселәргә тәғәйенләп тротуарҙарҙа ҡыҙылһыу төҫтәге махсус һыҙат ҡалдырылған һәм шул тошта йәйәүлеләр уларға мотлаҡ юл бирергә тейеш. Арзан был транспортты алмандар бик яратып ҡуллана, йөк ташыу өсөн махсус япмалар, ҡоршауҙар менән эшләнгәндәре лә бар.

«Фрау» алманса «ҡатын» тигәнде аңлата, тик һәр ҡалала тиерлек ошондай атама менән йөрөтөлгән кирхалар (сиркәүҙәр) мин уйлағанса ҡатындар өсөн түгел, ә Изге ҡатындарға (Мәрйәм-анаға) бағышланған ғибәҙәтханалар икән. Унда булырыбыҙҙы Өфөлә саҡта уҡ әйткәйнеләр, шуға күрә республикабыҙҙа йәшәгән алмандарҙың дини ихтыяждары нисек ҡәнәғәтләндерелеүе тураһында мәғлүмәттәрҙе тағы бер байҡап сыҡтым. Башҡортостан алмандары өс дини ағымға ҡарай: лютерандар, католиктар һәм Яңы Апостол мәҙһәбе. Һуңғыһы протестантизмға яҡыныраҡ ағым. Һәр ағымдың үҙ ғибәҙәтханалары бар, ҡайһы бер кирхаларын Германия ярҙамында тергеҙгәндәр.

1910 йылда уҡ Өфөнөң Беляков урамында евангелист-лютерандарҙың сиркәүе төҙөлгән. Унда Германия һәм Балтик буйы сығышлы кешеләр ғибәҙәт ҡылырға йөрөгән һәм шуға күрә Аллаға табыныу саралары алман, эстон, латыш телендә үткәрелгән. Беренсе донъя һуғышы башланыу кирханың эшмәкәрлегенә ҡамасауламаған, әммә 30-сы йылдарҙа төрлө сәбәптәр табып, уны яптырғандар һәм ниндәйҙер ойошмаға келәт итеп файҙаланыуға биргәндәр. Әлеге көндә дин тотоусылар уны кире юллап алған һәм аяҡҡа баҫтырыу эшенә тотонған.

Алғараҡ китеп әйтәйем әле, юлъяҙмамды тамамлап килгәндә Мәскәүҙән Рәсәйҙең Европа өлөшө европа-лютеран сиркәүе епископы З.Шпрингер әфәнденән Башҡортостанда йәшәгән этник алмандарҙың традицияларын һәм мәҙәниәтен тергеҙеүҙә даими ярҙам күрһә-

телеүгә рәхмәт белдереп республикабыҙ хөкүмәтенә хат килеп төштө.

— Шунса милләт, шунса дин — нисек һыйышып, үҙ-ара уртаҡ тел табып йәшәйһегеҙ? — тип һорауылар алман депутаттары мин ошо хаҡта бәйән иткәс.

— Беренсенән, республикабыҙға исем биргән милләт — башҡорттар — йомарт, мәрхәмәтле, кем килһә лә үҙ итеп һыйындырып торған, ышанған. Ҡайһы саҡ был сифаттарыбыҙҙы яман ниәттә файҙаланыуҙарын күрә тороп та ышанған. Тәү сиратта халҡыбыҙҙың башҡаларға дуҫтарса мөнәсәбәте дәүләтебеҙҙәге тыныслыҡты тәьмин итә. Республикабыҙҙа милли сәйәсәт Конституциябыҙға, уға яраšлы башҡа ҡанундарыбыҙға нигеҙләнә. Беҙҙең ҡанундар милләт, дин айырыуҙы тыя һәм был талаптар бөтә власть структуралары тарафынан тайпылғыһыҙ үтәлә, — тип яуапланым.

— Мин республикағыҙҙа булғаным бар һәм әйткәндәрегеҙҙе үҙ күҙем менән күреп инандым — башҡорттар сабыр, ихлас, ҡунаҡсыл халыҡ, — тип ҡуйҙы Европа мәсьәләләре буйынса комитет рәйесе Рольф Йенихен әфәнде.

Фраукирхен сиркәүе һуғыш ваҡытында ныҡ ҡына емерелгән, уны инглиздәр бомбаға тотҡандар икән. Шуның өсөн ғәфү үтенеү һәм ярашыу йөҙөнән Англия сиркәүҙе тергеҙеүгә иғәнә индергән, бина алдында Мартин Лютерға ҡуйылған һәйкәл — улар бүләге, тинеләр.

Сиркәүҙе аяҡҡа баҫтырыу менән шөғөлләнгән ойошма етәксеһенә бында буласаҡ китапхана өсөн бүләккә килтерелгән Башҡортостан тураһындағы китапты тапшырғанда республикабыҙҙағы сиркәүҙәрҙең, мәсеттәрҙең фотоларын асып күрһәттем, конфессиялар араһында ла, милләттәр араһында ла, илдәр араһында ла татыулыҡ, кешелектең аң-рухын камиллаштырыу йәһәтенән хеҙмәттәшлек хөкөм һөрөүен теләүебеҙҙе әйттем.

...Дрезденның үҙәгендә король һарайы һаҡланған. Ул да баяғы ҡарая торған ҡомташтан һалынып, ҡыйыҡ тураһына дин буйынса изге тип һаналған шәхестәрҙең скульптуралары беркетелгән. Ошо уҡ үҙәк майҙанда — төрлө замандарҙың атаҡлы йырсыларының тауышы яңғыраған Саксония дәүләт опера театры. Беҙгә лә унда булып, Шекспирҙың әҫәре буйынса ҡуйылған «Лир» тигән һоҡланғыс тамаша менән хозурланыу бәхете тейҙе.

### Өсөнсө тәүлек

Лейпциг йәрминкәләре борондан дан тотҡан, совет осоронда ла быны белмәгән кеше булмағандыр. Унда барырға тейеш икәнлегебеҙҙе белгәс, ҡыуанып киттем. Ҡатын кешемен бит әле, бик хирес булмаһам да, сепрәк-сапраҡ мине лә улай уҡ битараф ҡалдырмай. Етмәһә, маҡтаулы алман сифаты! Шуға ла дойчмаркаларымды өҫкәрәк сығарып һалып алдым — йәрминкә һынлы йәрминкәнән буш ҡайтылмаҫ инде...

Бында ҡалалар бер-береһенә яҡын урынлашҡан. Бөтә уңайлыҡтары, ғәфү итегеҙ, хатта хәжәт үтәй торған кабинаһы булған ҙур автобуста һә тигәнсе барып та индек Лейпцигка. Ҡаланың Яңы Ратуша тип йөрөтөлгән бинаһында Иҡтисади булышлыҡ ведомствоһы етәксеһе доктор Шиманский (фамилияһына ҡарағанда, алман славяндарынан булыуы ихтимал, унда сорб тигән милли әҙселеккә ингән халыҡ йәшәй) үҙ вәкәләттәренә ингән мәсьәләләр буйынса ялҡытҡыс телмәр тотоп ташланы.

Ниһайәт, мин дүрт күҙ менән көткән минуттар ҙа килеп етте — беҙ данлыҡлы Лейпциг йәрминкәһендә! Тик унда күңелде һүрерлек тынлыҡ, эс бошорғос бушлыҡ ҡаршыланы. Баҡһаң, әле бер ниндәй сауҙакүргәҙмә юҡ, тулыһынса үҙгәртеп төҙөү бара икән. Түңкәрелгән ярымцилиндр рәүешендәге быяла конструкциялар ҙур аквариумды хәтерләтә, хәҙер Германияла, ғөмүмән, ошондай полимер төҙөлөш материалдары өҫтөнлөк итеүе күҙгә ташланды. Яҡты, киңлек-иркенлек тойғоһо уята бындай биналар.

Йәрминкәне тағы славян фамилиялы кеше күрһәтеп йөрөнө. Урыҫса акцентһыҙ тиерлек һөйләшә, баҡһаң, беҙҙең ил менән сауҙа бәйләнештәре буйынса күптән эшләй, бер нисә йыл Рәсәйҙә лә

йәшәгән. Ул Яңы Лейпциг йәрминкәһенең перспективалары хаҡында һөйләне, беҙ ҙә ҡалышманыҡ, республикабыҙҙа сығарылған вертолет моделен бүләк итеп, уның һәйбәт сифаттарын тасуирланыҡ, тауарҙарыбыҙҙы күрһәтергә теләгебеҙ барлығын белдерҙек. Ә ниңә, беҙ кемдән кәм!

* * *

*Белешмә өсөн:*

Германия Федератив Республикаһы беҙҙең төбәк менән тығыҙ иҡтисади бәйләнештә тора. Республикабыҙ менән хеҙмәттәшлек иткән һикһәндән ашыу ил араһында ул — иң әүҙемдәрҙән. Иҫәп миллиондарса америка доллары менән бара. Башҡортостан предприятиелары Германияға минералдар һәм яғыулыҡ, химия тауарҙары, металл, ағас-таш оҙатһа, унан беҙгә аҙыҡ-түлек, текстиль, машиналар, ҡорамалдар, транспорт кәрәк-ярағы килә.

Әлеге көндә республикала башҡорт-герман берлектәге предприятиелары һаны егермегә етһә, герман фирмаларынан дүрт вәкиллек булдырылған. «Башҡорт граниты» предприятиеһы, мәҫәлән, алман технологик ҡорамалдары ярҙамында мәрмәр һәм гранит эшкәртә. Банкылар араһында ла кредит килешеүҙәре төҙөлә. Химия предприятиеларын инвестициялау йәһәтенән ике яҡ өсөн дә отошло проекттар әҙерләнгән.

1992 йылдың июнендә үк әле Дрезден ҡалаһында ул саҡта Башҡортостандың Юғары Советы рәйесе булып эшләгән Мортаза Рәхимов һәм Ирекле Саксония Дәүләтенең премьер-министры Курт Биденкопф Сауҙа, иҡтисади, ижтимағи һәм мәҙәни бәйләнештәр тураһында берлектәге ғаризнамәгә һәм уға бәйле Финанс беркетмәһенә ҡул ҡуйған. Был документтар буйынса, Германиянан беҙгә ебәрелгән тауарҙарҙың кәмендә 80 проценты тап бына Саксония өлөшөнә тура килергә тейеш.

Башҡортостанда Саксония көндәре, Саксонияла Башҡортостан көндәре үткәрелеп тора, улар эшләнгәнгә йомғаҡ яһарға мөмкинлек биреү өҫтөнә һәр саҡ республикабыҙ өсөн файҙалы яңы килешеүҙәр төҙөү менән тамамлана.

Башҡортостанда этник алмандар йәшәүен дә онотмай милләттәштәре. 1999 йылда Башҡортостан һәм Саксония хөкүмәттәре тырышлығы менән күпселектә ошо халыҡ йәшәгән һәм эшләгән «Россия» колхозы һәм саксон фирмаһы «Шварцадлер» ҡатнашлығында агросәнәғәт предприятиеһы булдырылды. Берлектәге сауҙа йорто ойошторор ҙа күҙҙә тотола, Өфөлә саксон тауарҙары күргәҙмә-сауҙаһы булғаны бар.

Ә өсөнсө йыл Германияла асылған Бөтә донъя ЭКСПО-2000 күргәҙмәһе ике республика араһындағы хеҙмәттәшлектең иң сағыу өлгөһө булып тора. Ошо сара сиктәрендә Ганновер ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре үткәрелде. Саксониялағы партнерҙар күргәҙмәлә ике яҡ өсөн дә отошло күп кенә перспективалар астылар һәм был бәйләнештәргә яңы һулыш өҫтәне.

* * *

Башҡортостан һәм Саксония парламенттары араһында хеҙмәттәшлек әлегә башланғыс осоро кисерә. Әммә федерация субъекттары булып торған ике республика өсөн законмдар сығарыу өлкәһендә бербереһенән өйрәнерҙәй, тәжрибә уртаҡлашырҙай йүнәлештәр бар. Ғөмүмән, иҡтисад булһынмы, социаль, мәҙәниәт-мәғрифәт мәсьәләләре булһынмы, тәү сиратта закондарға таяна. Шулай икән, депутаттар ҙа үҙ-ара осрашып торорға тейештәр.

Саксонияның урындағы үҙидара, дин мәсьәләләренә ҡағылышлы закондары, үҙем шул йүнәлештә эшләгән комитеттан булғас, ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, уларҙы һорап алып ҡайттым. Киске аштар мәлендә лә алман коллегаларыма Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында һәр яҡтан тотороҡло, һүҙендә торған партнер булыуын, һикһәндән ашыу илдең беҙгә инвестициялар индереүен, республикабыҙға бик юғары ышаныс

коэффициенты биреүҙәрен һөйләнем.

Саксонияла демография күрһәткестәре шулай уҡ бик маҡтанырлыҡ түгел икән. Шул юҫыҡта әңгәмә башланғас, һуңғы ваҡытта беҙҙә һәр йылдың социаль йүнәлешле бер исем алыуын әйтеп киттем. Бала, Әсә йылдарында Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов, закондар сығарыусылар, хөкүмәт тарафынан ғаиләләргә социаль ярҙам күрһәтеү йөҙөнән күрелгән саралар тураһындағы мәғлүмәттәрем алмандарҙа ҡыҙыҡһыныу уятты. Президентыбыҙ Указы буйынса дүрт һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләргә махсус пособие түләнеүен, ун балалыларға фатир, машина бирелеүен ишетеп, Йенихен әфәнде:

— Һеҙ ғаилә мәсьәләләрен шул тиклем яҡшы беләһегеҙ, моғайын, шуға ярашлы комитетта эшләйһегеҙҙер, — тип ҡуйҙы.

Көлөп ебәрҙем дә:

— Ғаилә мотлаҡ ҡатындар иғтибары үҙәгендә тип уйлаусандар. Минеңсә, ғаилә ул — тәү сиратта ир-ат, атай кеше хәстәрлек күрергә тейешле объект. Күҙгә бәрелеп торорлоҡ эштәр башҡарыла икән, уны депутаттар ғына түгел, республиканың барса граждандары белеп тора, ә мин дин мәсьәләләре менән шөғөлләнәм, — тинем.

Рәсми булмаған шарттарҙағы һөйләшеүҙәр ҙә ике ил араһындағы мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға булышлыҡ итеүе шикһеҙ, сәйәсәттә ваҡ нәмә юҡ.

...Көндөң икенсе яртыһы онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар бүләк итте — Веезенштайн тигән замокта булып, урта быуаттар атмосфераһына күмелеп, шул дәүерҙә тыуҙырылған гүзәл архитектура ҡомартҡыларын хозур ҡылып ҡайттыҡ.

Автобусыбыҙ ҡуйы йүкә урмандары ҡаплаған тау юлдарынан елдерә, нәҡ Архангель районынан Белорет биләмәһенә барып ингән ер инде. Самолеттан уҡ йәшеллеккә күмелгән ҡалаларҙы күреп хайран ҡалғайным — дөрөҫөн әйткәндә, урмандары менән дан тотҡан тыуған районым бының менән сағыштырғанда башына таҙ төшкән ҡарт икән. Аяуһыҙ ҡыралар бит ағастарҙы.

Июнь уртаһы етмәгән, йүкә шау сәскәгә күмелгән — еҫтәре иҫертерлек. Тик, беҙҙәгенән айырмалы рәүештә, бал ҡорттары гөжләгәне генә ишетелмәй. Әрә-әм! Түҙмәнем, шулай тип әйтеп ҡуйҙым хатта. Алман депутаты аптырап ҡарап ҡуйҙы. Йүкә урмандарын бал ҡорто менән бәйләр өсөн башҡорт булып тыуырға кәрәктер.

Әйткәндәй, Лейпциг атамаһы тап «йүкә» тигәндән килеп сыҡҡан тиҙәр. Был урындар лужица славяндарыныҡы булған. Алман ҡәбиләләре яулап алып, күп өлөшөн ассимиляциялаған һәм әле уларҙың һаны 100 меңләп кенә иҫәпләнә. Ә Липск тигән төбәктәре хәҙер Лейпциг аталмыш.

Перәник ҡаласыҡҡа оҡшап торған сихри замок ҡая ташҡа менеп ҡунаҡлаған. Таш диуарға инер ерҙә Ландтаг президенты үҙенең ярҙамсылары менән көтөп тә тора. Ульрика исемле экскурсовод ҡыҙ артынан эйәрәбеҙ ҙә урта быуат мөхитенә инеп сумабыҙ.

Ағас сатырҙары кәбән рәүешле итеп ҡырҡылған, йомшаҡ хәтфә үлән тигеҙ итеп сабылған. Юлдың уң яғынан тау итәге башлана, уны ситләп ауылымдың ике яғын ҡайып аҡҡан Һилеғорго һәм Йөйәкте хәтерләткән саф һыулы йылға гөрөлдәй. Унда бәрҙе бик күп, тинеләр. Замокҡа барып еткәс, урта быуаттарҙа уҡ ҡоролоп һаманғаса ҡулланылып килгән һыу тирмәнен әйләндереп, йылға әллә ҡайҙа түбәнгә убыла.

Замок 1318 йылда готик ысул менән һалына башлаған һәм быуаттар буйына яңы ҡоролмалар, биҙәктәр өҫтәлә барып, төрлө архитектура стилдәре музейы рәүешенә ингән һәм хәҙерге көндә дәүләт ҡанаты аҫтына алынған. Рококоһын да, бароккоһын да, классицизм өлгөләрен дә күрергә була бында. «Әкиәт һарайы»ның боронғо хужалары — король әҡрәбәләре — абруйлы ике ғаилә булып, уларҙың береһенең генә токомдары бөгөнгә килеп еткән, һәм тап бына улар ҡанбабалары мираҫын дәүләткә һатып, бүтән бер ҡасан да кире һорамаҫҡа килешкән.

Текә генә баҫҡыстар буйлап бер нисә метр күтәрелгәс, алдыбыҙҙа экиәти ландшафт асылды. Баҡһаң, был йылға үҙенә күрә замокты һаҡлап тороусы кәртә лә булған икән. Дошмандар бында һиҙҙермәй генә үтә алмағандыр, моғайын: бер яғынан — текә ҡая таш, икенсе тарафтан — һәр йән эйәһе ус төбөндәге кеүек күренеп торған асыҡ ялан.

Замок диуары ҡая таштың дауамы булып күккә үрелә, мәмерйә ауыҙына оҡшаш арка аша нисәмә быуат элек юнылған таштан ҡупшылап һалынған юл буйлап ары күтәреләбеҙ һәм тәүге ҡатта урынлашҡан бәләкәй генә соборға барып инәбеҙ.

...Институтта уҡығанда күп милләтле курсташтарым араһында өс алман ҡыҙы бар ине, Лиза исемлеһе менән бик дуҫ булдыҡ, уның менән өс йыл бер бүлмәлә йәшәп, эс серҙәребеҙ берегеп бөткәйне. Тик ул бит үҙебеҙҙеке, сәүит иленеке, ә быларҙың фашистар менән тамырҙашлыҡтары ҡайта-ҡайта иҫкә төшә лә тора.

Алдымдан китеп барған Ульриканың ҡиәфәте, буй-һыны, бигерәк тә готик скульптураларҙағы кеүек йөҙ һыҙаттары әхирәтемде хәтерләтеп тора. Сәсен бер нисә миллиметр оҙонлоҡта ғына ҡалдырып ҡырҡтырған да, алдан оҙон ғына бер өлтөк ҡалдырып бөҙрәләтеп маңлайына төшөргән.

Ҡыҙыҡай сиркәү музыкаһын тыңлата-тыңлата соборҙың тарихын һөйләй. Ғибәҙәтхана 1504 йылда төҙөлә башлап, 1738 йылда барокко стиленә яраштырып биҙәлә һәм ҡатмарлы был эш өс йылға яҡын бара: баҡһаң, таштандыр тип уйлаған колонналар ҙа, мәрмәрҙән юнылғандыр кеүек тойолған скульптуралар ҙа ... ағастан икән дәбаһа. Урыҫ әйтмешләй, дешево и сердито! Замок хужаһы данлыҡлы балта оҫтаһын саҡырып алған да арзан, әммә бының шулай икәнен һис кем белмәҫлек итеп эшләргә ҡушҡан. Балта оҫтаһы кешелек донъяһы хазинаһы булып һаналырлыҡ шедевр ижад иткән. Бына ҡайҙан икән ул опера театрында яһалма ағас, мәрмәр ҡулланыу традицияһы! Ялған документтарҙы «липа» тип атауҙары ла юҡҡа түгелдер.

Ульрика әйтеүенсә, ҡайһы саҡ шундай бай биҙәлешенә ҡарап, ғибәҙәтхананы католиктарҙыҡы тип уйлайҙар икән, әммә уны евангелистар төҙөгән, ә улар аҡсаны һанай белеүе менән (һаранлығы менән тип әйтмәгән булайыҡ инде) айырылып тора.

Сиркәүҙәр кеше психологияһына тәьҫир итеү ысулдарын оҫта файҙаланған. Бында ла, мәҫәлән, ғибәҙәт ҡылырға килеүселәр ултырған урынды ҙур кәмә һымағыраҡ итеп эшләгәндәр, йәғни, кем генә булмайыҡ, ниндәй дәрәжәгә өлгәшмәйек, ваҡыт даръяһында бергә йөҙәбеҙ, Алла ҡаршыһына бергә баҫасаҡбыҙ тигән мәғәнә һалынған.

Белеүебеҙсә, һуғыш ваҡытында Германияның тарихи-мәҙәни ҡомарҡылары ныҡ зыян күрә. Инглиз осоусыларының ошо тирәне бомбаға тотоуы мәғлүм. Нисек замоктағы ҡомарҡылар һаҡланып ҡала алған һуң? Шундай һорау биргәс, һалдаттарыбыҙға ихтирамды көсәйтерлек яуап ишеттек:

— Һуғыш ваҡытында бында бер генә лә бомба төшмәгән, тарихи ҡомарҡыны һаҡларға күрһәтмә бирелгән булған. Совет Армияһы яулап алғас, һәр нәмәне, хатта обойҙарҙы ла ентекләп исемлеккә индереп иҫәпкә алалар һәм ваҡыт уҙыу менән яңы Германия хужаларына тапшыралар.

Киске ашҡа ошо замоктағы ҡасандыр королдәр һунарҙан һуң туҡланған ашханаға саҡырҙылар. Боронғо еҙ ҡашығаяҡ, табаҡ-сөлмәктәр алтындай ялтыратып йыуылған, музей экспонаттары сифатында теҙелеп, асып ҡуйылған, боронғо мейес тә һаҡланған. Ғөмүмән, алмандар ата-бабалары ҡомарҡыһын иҫ киткес ихтирам менән, яратып һаҡлайҙар, шундай нескә күңелле, матурлыҡ яратҡан халыҡ нисек анау тиклем ҡан ҡоя алғаны башҡа һыймай китә.

Алман аш-һыуы шәреҡтәге кеүек табын һыйылдырып ултырмай, әҙерләнеше лә ябай. Бер блюдоны икенсеһе менән алыштырған арала ҡапҡылап ултырырлыҡ башҡа

нәмә булмай; беҙҙә бит төрлө салаттар, емеш-еләк, ҡамыр аштары баштан аҙағына тиклем өҫтәл тулы. Шараптары яҡшы сифатлы, тәмле, иҫертерлек көслө түгел. Уны ла самалап ҡына, алмаш блюдо алдынан йотҡолап ҡуялар. Ир-атҡа алман һыраһы оҡшаны.

Аш-һыуҙы башҡорттар һымағыраҡ яраштыралар кеүек тойолдо — аҙыҡтың тәбиғи тәме һаҡлана, тәмләткестәр бик аҙ ҡулланыла, артыҡ биҙәп тә тормайҙар. Әммә ошо ябайлыҡҡа ла матурлыҡ индерә беләләр.

Рестарандарҙа хеҙмәтләндереүсе ҡыҙҙарҙың боронғоса кейемдәр кейенеүҙәре үҙенсәлекле бер сифат: уҙған быуатты һүрәтләгән фильмдарҙағы кеүек аҡ ситсанан тегелгән киң оҙон алъяпҡыс тағалар, ул итәк кеүек ҡаплап торғанлыҡтан, кейем арттан да бысранмай. Аяҡтарында — нәзәкәтлелектән алыҫ түбән үксәле эш ботинкалары.

Табын этикеты ҡәтғи үтәлә: сәнске менән бысағыңды тәрилкәгә тейешле рәүештә сатрашлап һалып ҡуймаһыңмы, уны алдыңдан алып, икенсе блюдо килтермәйәсәктәр, һин әле быныһын дауам итергә теләйһең, башҡаһы кәрәкмәй тип уйлаясаҡтар. Бер кемде лә ихтыярһыҙлап ашарға йәки эсергә мәжбүр итмәүҙәрен оҡшаттым.

Башҡортта сәй эсеп туйыуыңды белдерер өсөн сынаяҡты түңкәреү ғәҙәте бар, төрөктәр түңкәрмәй, балғалаҡты өҫтөнә арҡыры һала. Ашһыуҙы беҙ хәҙер европасараҡ, беренсе, икенсе блюдо итеп биргән булабыҙ, үҙ ғәҙәттәребеҙҙе һанламайбыҙ. Ә сәләмәтлекте һаҡлар өсөн туҡланыуҙа милли этикет бик мөһим икәнлеген асыҡлаған ғалимдар, сөнки быуаттар буйы ашҡаҙандағы ферменттар шуға ярашлы формалашҡан.

Грузияла булғанымда, мәҫәлән, уларҙың да ҡунаҡтарға беҙҙәге кеүек башта сәй биреүҙәренә иғтибар иттем. Сәй янына шәкәр-кәнфиттән башҡа нәмә ҡуйылмай. Арыу уҡ ваҡыт үткәс кенә башҡа блюдолар килтерелә, әммә шул тиклем бай табында аш-өйрә көтөү файҙаһыҙ.

Беҙҙең яҡта ла элек сәйҙән һуң тоҙлоҡ менән ит килтерәләр ҙә, шунан ҡоротло һурпа, һуңынан туҡмас биреп, табынды тағы сәй менән тамамлаҙар ине. Үҫемлек ризыҡтары, еләк-емеш — миҙгеленә ҡарап ҡына.

Алмандарға, грузиндарға ҡарап, үҙ еребеҙҙә үҙ ғәҙәттәребеҙгә ярашлы туҡланырға кәрәктер, тигән һығымта яһап ҡуйҙым.

### Дүртенсе тәүлек

Иртә менән Лепперсдорф тигән ауылға, «Захсенмилх АГ» тип йөрөтөлгән хосуси һөт комбинатына алып киттеләр. Предприятие етәкселәренең береһе, Ман фамилиялы йәш кенә егет һәр беребеҙгә полиэтилен халаттар, аҡ башлыҡтар таратып бирә, аяҡ кейемебеҙ өҫтөнән сепрәк ҡата кейҙертә, шундай ҡәтғи талап үтәлгәс кенә әллә ҡайҙан аҡ металл көмбәҙҙәре менән ялтырап ултырған бина эсенә үтәбеҙ. Эстә фотоға төшөрөү тыйыла.

Төрлө йыуанлыҡтағы аҡ металл торбалар сейнәлешеп үҙе аша тонналарса һөт үткәрә: берәүҙәре уны һөҙөп, механик бысрағынан айыра, икенселәре сепаратор вазифаһын үтәй, өсөнсөләре юғары температура ярҙамында эшкәртеп, төрлө ризыҡтар эшләү цехына оҙата. Комбинатта йөҙҙәрсә төр кефир, йогурт, эремсектәр, данлыҡлы сырҙар етештерелә.

Предприятиены монополист тиергә лә булалыр, төбәктә етештерелгән һөт ризыҡтарының һикһән проценты тирәһе уныҡы икән.

Сеймал төрлө сығанаҡтарҙан килә, хатта бер генә һыйыр тотоусы кешеләр ҙә һөт тапшырып тора, тип яуапланы минең ошо хаҡтағы һорауыма Ман әфәнде.

Комбинатта эшләүселәр өсөн төҙөлгән ашханала (эшселәр бында түләүһеҙ туҡлана, тинеләр) һөт ризыҡтарын тәмләп ҡараныҡ, беҙҙең килеүебеҙ уларға үҙенсәлекле реклама ла булып тора икән, хужа шуның өсөн рәхмәт белдерҙе. Юғары технология ҡулланып етештерелгән йогурттары, һөттәре бик оҙаҡ һаҡлана, шуға сит илдәргә сығарыу мөмкинлеге лә бар. Юҡҡамы ни, беҙҙең магазиндарҙа алман йогурттары йыш күренә.

Башҡортостанда ла агросәнәғәт предприятиелары алдынғы технологиялар ҡуллана башланы. Ҡайҙалыр эле беҙ күргән кеүек гигант предприятиелар үҙен аҡлай, ә таулы-ташлы, колхоздар булмаған төбәктәрҙә, мәҫәлән, Белорет районының төпкөл ауыл-ҡасабаларында, мини-заводтар, әллә ни отош бирмәһә лә, ауыл халҡының ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерә ала. Тик беҙҙә яҡшы тоҡомло һыйырҙарҙың аҙлығы, көтөүлектәр булмауы бәкәлгә һуға. Был эшкә комплекслы ҡараш кәрәктер — кемдер мал аҙығы әҙерләүгә, уның ҡайһы бер төрҙәрен ситтән алып ҡайтыуға махсуслашһа, ҡолас ташлап уҡ булмаһа ла, ветеринария, тоҡомсолоҡ хеҙмәте ойоштороу ҙа зарур. Ауылдар буйлап һөт йыйыусыларға ла ихтыяж бар.

Гигант предприятиеның айырым кешеләрҙән һөт алырға тартынмағанлығы шулай уҡ фәһемле. Ниңә эле беҙ тик колхоздарға, фермерҙарға ғына күҙ терәп торорға тейеш?

Көн тулыһынса тиерлек алман етештереүселәренең эш тәжрибәләрен күҙәтеүгә бағышланды. Төшкә Майсен ҡалаһына барып етеп, ундағы данлыҡлы фарфор мануфактураһы менән таныштыҡ.

Предприятие дәүләттеке, управляющийы доктор Вальтер әфәнде бер ҡолағына алҡа тағып алған «модный» кеше булып сыҡты. Был беҙҙәнеү әйберен, ғөмүмән, алман ир-егеттәре ифрат «уважать» итә — урамға сығыу менән коляска этеп килгән һаҡалтайҙың ҡолағында ҡатлап-ҡатлап кейелгән өс төрлө алҡаны күргәс, беҙҙе ҡаршылаған әфәнде замандан арттараҡ ҡала кеүек тойолдо хатта.

Мануфактурала ишеткән-күргәндәребеҙ ғәйәт фәһемле, тарихи әһәмиәткә лә эйә, шул уҡ ваҡытта эстетик кинәнес бирә торған ҡаҙаныш булып сыҡты.

Майсен фарфоры тулыһынса ҡулдан эшләнеүе менән айырылып тора. Уны королгә алтын эшләү ысулын табырға һүҙ биргән Бетгер фамилиялы бер алхимик уйлап тапҡан һәм тәүге өлгөләре әлеге кеүек аҡ түгел, ә көрәнһыу ҡыҙыл булған. Һуңғараҡ Германияның данын күтәрәсәк был асыш авторын иһә ғәзелһеҙ яза көтә — королгә биргән вәғәҙәһе үтәлмәү һылтауы менән меҫкенде зиндарға ырғыталар. Ғәмәлдә, фарфор серен башҡаларға сисеп ҡуймаһын өсөн шулай эшләгәндәр, тиҙәр.

1710 йылда ҡалала завод төҙөлә, сеймал артынан да алыҫ йөрөйһө юҡ — эргәлә генә юғары сифатлы каолин һәм балсыҡ ятҡылығы булғанлығы асыҡлана һәм улар әлегә хәтлем ҡулланыла.

Фойела халыҡ ҡайнап тора, ниндәйҙер билеттар һатып алалар, беҙҙе иһә таҫма менән бүленгән аулаҡ урындан йәһәт-йәһәт кенә бер бүлмәгә алып инделәр. Кафедра рәүешлерәк урында ҡулдары аҡ балсыҡҡа буялған кеше ултыра, уның алдында — көршәкселәр ҡуллана торған өйөрөлткөс, аҡ иҙмә һалынған ҙур табаҡ. Беҙ инеүҙе күреүгә осҡа тиҙ генә услап балсыҡ алды ла теге ҡулайламала әйләндереп, бәләкәй генә сүлмәк эшләп тә ҡуйҙы.

Оҙаҡ диҡҡәтләп торорға бирмәй, беҙҙе икенсе бүлмәгә оҙаттылар. Алдыбыҙҙан башҡа бер төркөм йөрөй икән, уларҙың ҡул саба-саба арғы ишектән сығыуҙарын ғына күреп ҡалдыҡ. Баҡһаң, фойела эркелешкән халыҡ экскурсияға килгән дә, билеттарҙы ошонда инеп майсен фарфоры тигән мөғжизә тыуыуын тамашалар өсөн бик ҡыйбатҡа һатып ала икән. Ҡарар өсөн генә түләйҙәр, йә. Отош ала беләләр мануфактурала! Артыбыҙса тағы бер төркөм инеп ҡалды, беҙ йоланы аңланыҡ инде, ҡул саба-саба алға йүнәлдек.

Артабанғы этапта әле кибеп тә етмәгән һауыттарға биҙәктәр төшөрөүҙәрен күрҙек. Бөтә технология күҙ алдында кеүек тойолһа ла, балсыҡ составын да, буяуҙарҙың нисек эшләнеүен дә сер итеп тоталар. Һауыттарҙы тейешле рәсемдәр төшөрөлгәс кенә яндыралар, һәм беҙ күргән йәшел буяу күк төҫкә инә. Күк төҫ — майсен фарфорының фирма маркаһы биргән төҫө. Шулай уҡ сатрашланған өс хәнйәр һыҙатланышы бында сығарылған һауыттарҙы айырып торған тамға булараҡ бөтә донъяла киң билдәле. Глазурь аҫтында ҡалдырылған был

рәсем менән сығарылған һауыт-һабаны 1775 йылдан бирле мөһөрләйҙәр. Ул иҫ киткес ҡиммәт, шул сәбәпле оҡшаштырып ялған әйберҙәр сығарырға маташыусылар әҙ түгел. Мәгәр белгән кеше майсен фарфорын һис ҡасан да бутамай.

Ҡыйбатлы ҡытай фарфорына алмаш тапҡан алмандар башта көнсығышҡа эйәрһәләр ҙә, торабара үҙ биҙәктәрен уйлап таба, һауыт-һаба ғына түгел, скульптуралар, биҙәү йыһаздары, табакеркалар, кейек-ҡош һындары етештерә башлай. Баҡһаң, был һындарҙың һәр өлөшө айырым ҡалыпта һуғыла ла, шул уҡ балсыҡ менән йәбештерелеп бөтәүле әйбергә әүерелә икән. Әҙәм ҡулы машина түгел бит, бер миллиметрға булһа ла ҡыйышыраҡ йәбештерелә, шуға әҙерләмәләр бербереһенән саҡ ҡына айырыла, үҙенә башҡараҡ килеп сыға.

XVIII быуаттың 60-сы йылдарына тиклемге эшләнмәләр рококо рухында башҡарыла, Кендлер, Кирхнер, Эберлейн фамилиялы талантлы оҫталар яңынан-яңы жанрҙар, алымдар уйлап таба, мауығып ижад итә. Витриналарҙағы ысынысындан сәнғәт әҫәрҙәренән күҙ китмәй: пастораль, галантлылыҡ сәхнәләре, комедия персонаждары, фарфор пластикаһын нескә тойоп ҡатмарлы-нәзәкәтле биҙәк-һырҙар һалып эшләнгән төрлө әйберҙәрҙең баһаһы һис тә алтындан ҡайтыш түгел.

1770 йылдарҙан классика, академлыҡ өҫтөнлөк итә башлай. Экспонаттарҙа һәр заман һулышы асыҡ сағыла. Ретроға мөкиббән алмандар ҡыҙыл балсыҡ менән эшләүҙе лә тергеҙеп ҡараған, яңынанъяңы буяуҙар, алымдар эҙләйҙәр. Тик теге күк төҫтәге хәнйәрҙәр генә үҙгәрешһеҙ...

Бында бер ваҡытта ла бер кемгә лә бүләк биргәндәре юҡ икән; әйтеүҙәренсә, беҙҙең өсөн генә ҡағиҙәне боҙҙолар — ҡалыптан әле генә алынған бәләкәй генә уйынсыҡ баштарын еүеш көйөнсә ҡулыбыҙға тотторҙолар.

Осрашыуҙар протоколына ярашлы, кискелеккә йәнә мәҙәни программа ҡаралғайны — был юлы ошо уҡ ҡалалағы Альбрехтсбург замогын һәм урта быуаттарҙа төҙөлгән тағы бер соборҙы күрһәттеләр. Соборҙа изге һаналған шәхестәр ерләнгән һәм ҡәберҙәре өҫтөнә уларҙың портреты сүкеп яһалған ҡара тимер плиталар һалынған. Стеналарҙа ла — Изгеләр һыны. Башҡа дин мөхитендә тәрбиәләнгәлектәндер — улар миндә сәнғәт әҫәре һәм тарихи шәхестәр һынланышы булараҡ ҡына ҡыҙыҡһыныу уята. Бер кемдең дә динен тәнҡитләргә йыйынмайым, әммә башымдан шундай уй сыҡмай: кешеләр ҡартайғансы сабый кеүек ҡурсаҡ уйнай — Алла икән тип һүрәтен-һынын эшлә лә, шуға табынып тик ултыр имеш! Әгәр Алла бар икән, беҙ күрер, кеше үлсәмдәре менән үлсәр ҡөҙрәт түгелдер ул...

Соборҙың архитектураһы үҙенсәлекле: ҡыҙғылт-һары ҡомһоу таштан эшләнгән бейек колонналар рәткә теҙелеп, арҡыры һыҙыҡлы шаршау эленгәндәй тойғо тыуҙыра — стеналар күренмәй, алда төҫлө быялаларҙан эшләнгән витраж да алтарь. Бина эсе һыуыҡ, ағастан эшләнгән иконалар боҙолмаһын өсөн ҡышын-йәйен бер температура тоторға тырышалар, әҙләп кенә яғалар икән.

Был стеналарға, колонналарға ете быуат кешеләренең тыны, күңелдәрендә йөрөткән бәндәүи уйкисерештәре һеңгән, дәүерҙәр һалҡынлығы арҡаны семерҙәтә.

Теүәл алтыла «Винценц Рихтер» ресторанды алдында булырға тейеш инек. Алмандарҙың протоколдан сығыуҙы өнәмәгәнен беләбеҙ, шәпшәп атлап шунда ашығабыҙ. Өлгөрҙөк — Майсендағы боронғо замок ансамбленә ингән бинаға килеп етеүгә майҙанға ҡарап торған Фрауенкирхен сиркәүенең йөҙйәшәр сәғәте зыңлатып һуға башланы. Артынса уҡ торба тауышы яңғыраны — ҡаяға һылашҡан йорттоң бейек болдоронда милли кейем кейгән музыкант беҙҙе сәләмләй булып сыҡты. Гайдн көйҙәре яңғырай.

Ҡаяташ өҫтөндәге болдор ҡырына бәләкәй генә баҡса ултыртыу яйын да тапҡандар, тупраҡты ташып һалғандарҙыр инде, ошо кескәй генә майҙансыҡты биҙәп ултырған сәскәләрҙең баһаһы нindәй!

Эскә үтәбеҙ — унда ла ҡыҫынҡы, өҫтәлдәр шыплап ҡуйылған, шулар араһында ла фикус-пальма үҫтерер яй тапҡандар. Төптә хөрмәтле ҡунаҡтар өсөн айырым бүлмә бар икән, ул музейҙы хәтерләтә: стеналарҙа, түшәмгә аҫыулы рыцарь кейемдәре, ҡоралдары, тимер шлемдар абажур хеҙмәтен үтәй. Ресторан хужаһы үҙе беҙ ашаған арала ҡайһы бер экспонаттарҙың тарихын һөйләй, хатта майсен фарфорын уйлап тапҡан Бетгерҙың үҙ асышы тураһындағы хаты төп нөсхәһендә ошонда һаҡлана. Байтаҡ йыһаздар ҙа урта быуаттан ҡалған, быны иҫбатлап хужа бер ултырғысты түңкәреп күрһәтә: ҡәҙим кешеләр ҡыҫҡа буйлы булғанлыҡтан, ул да бик тәпәш итеп эшләнгән һәм хәҙерге урта буйға иҫәпләнеп, аяҡтары ун сантиметр самаһы ялғанған имеш.

Киске табын тамамланғас, хужа подвалға саҡыра. Бында төрлө саҡта ҡулланылған боронғо язалау ҡоралдары тупланған. Бер-береһе менән тынмай талашҡан янъялсы ҡатындарҙы үҙәк майҙанға муйындарынан бер сыңйыр менән бығаулап ҡуя торған булғандар: улар бер-береһенән ғәфү үтенмәй тороп, был ауыр тимер ҡоршауҙарҙы ысҡындырып алмағандар.

Ҡатынына хыянат иткән ирҙәр биленә ауыр суйын киҫкә тағып йөрөргә мәжбүр булған.

— Ә ундай гонаһ ҡылған ҡатындарға ниндәй яза бирелгән? — тип һораны кемдер.

Хужа көлөмһөрәне лә:

— Ҡатындар былай эшләүе мөмкин түгел, — тип яуапланы.

Бына шундай ауыр язаларға дусар ителгәнлектән киләләр әле алмандарҙың ҡағиҙәләргә тайпылышһыҙ буйһоноуы — быуаттар дауамында тыңлаусанлыҡты халыҡтың ҡанына һеңдереп бөткәндәрҙер һәм Гитлерға һуҡырҙарса эйәреүҙәренең бер сәбәбелер ҙә, моғайын.

Алмандар — һуғышсан халыҡ. Төркиҙәр ҙә был йәһәттән ҡалышмай. Әммә ошондай уҡ боронғо әйберҙәр музейы рәүешле төрөк, әзербайжан рестарандарында тик йорт йыһаздары, биҙәү әйберҙәре, милли кейемдәр генә күрергә тура килгәйне. Ҡылыс, хәнйәр осраштыра. Ҡамсыны күҙ алдына килтерергә мөмкин. Әммә башҡа яза ҡоралдары... Ҡанундарыбыҙ ҡаты булһа ла, төркиҙәрҙә шундай махсус ҡулайламалар булмағандыр тип фараз итәм. Бәлки яңылышамдыр. Булған хәлдә лә тукланган урынға килтереп ҡуймаҫтар ине, моғайын. Менталитет башҡа...

Иртәгә юлға. Ҡарасы, өс-дүрт көн эсендә ошо илгә генә түгел, донъяға ҡарашым да күпмелер үҙгәрешкә дусар булған, әйтерһең, бейегерәк тау үркәсенә күтәрелгәнмен дә офоҡтар киңәйә төшкән.

Юғары мәҙәниәтле, бай тарихлы халыҡ был, әммә егерменсе быуатты тетрәткән һуғыштар алып барған; ҡотто алырлыҡ язалау ҡоралдары уйлап сығарған, әммә бер үк ваҡытта һоҡланырлыҡ сентименталь әҫәрҙәр ижад иткән, матурлыҡты нескә тоя белгән һәм белә. Күрәһең, алман күңеле лә йоҙаҡһыҙ һандыҡ түгел.

Йенихен әфәнде менән әңгәмәмдә халҡымдың матур сифаттарын мөмкин тиклем тулыраҡ асып бирергә тырышҡайным һәм, яугирлыҡ хас булһа ла, башҡорт бер ҡасан да ил баҫмаған, ул бары тик үҙ Ватанын яҡлап һуғышҡан, тигәйнем. Ошо һуңғы киске аш ваҡытында ул тулҡынландырғыс хәбәр әйтте: киләһе йыл император Наполеон башлаған 1812 йылғы яу ялҡыны тейеп киткән илдәрҙең етәкселәрен саҡырып, һуғыш башланыуҙың йөҙ туҡһан йыллығын билдәләмәкселәр икән. Унда Президентыбыҙ Рәхимовты ла саҡырырға ниәтләнәләр, баҡһаң.

— Бер музейыбыҙҙа шул һуғышта ҡатнашып, беҙҙең тупраҡта ятып ҡалған башҡорт яугире кейеме бар, унда милләттәштәрегеҙ ҡатнашҡанын, оҫта һуғышсылар булғанын яҡшы беләбеҙ, — тине алман коллегам.

Күҙҙәремә эркелгән йәштәремде саҡ тыйҙым: ниңә Рәсәйҙә «онотылар» һуң ошо хаҡта?!

Ихластан рәхмәт әйттем мин Рольф Йенихен әфәндегә. Кешелек үҫеш осоронда яһаған хаталарынан фәһем ала белергә, һыйышып йәшәргә өйрәнергә тейеш. Алман дуҫ-

тарҙың ниәттәре изге һәм 2001 йылдың 11 сентябрендәге донъяны тетрәткән фажиғәнән һуң бигерәк тә актуаль төҫ ала.

**Германияла һуңғы көн**

Программа буйынса беҙ был көндө Баутцендағы собор хазинахаһын ҡарарға ла, Грубшютцта булып, быға саса телгә алынған сорбтар менән осрашырға һәм уларҙың милли ресторанында төшкө аш ашарға тейеш инек. Киске биштә — самолет.

Мәгәр Германияла беренсе тапҡыр булғанлыҡтан, күбебеҙ Рейхстагты, Бранденбург ҡапҡаһын, совет һалдаттарына ҡуйылған һәйкәлдәрҙе күреп китергә теләк белдерҙе.

Дрездендың готика, рококо, барокко, классицизм рухындағы сәмәрле-һиммәтле архитектураһы, ҡыҙыл черепица ҡыйыҡлы йорттары артта ҡала. Бына ғәжәп, улар менән хушлашыу шулай һағышлы булыр тип уйламағайным да. Ярата башланым тип әйтә алмайым, әммә кешелек аҡылына, алтын ҡулдарына һәйкәл булып һаҡланған матди ҡомартҡылар һоҡланыу тойғоһо тыуҙыра, боронғолоҡ тылсымы сихырлай.

Килгәндә иғтибар ителмәгән, автобан буйында коллектив баҡсалар күренеп ҡала, уларға бик ҡул теймәгәнлеге һиҙелә: ГДР-ҙа ла бер саҡ беҙҙәге кеүек күпләп ер бүленеп, баҡсасылыҡ менән дәррәү шөғөлләнә башлаған булғандар. Әммә Берлин диуары емерелеү көнсығыштарҙы кинәт капитализм мөхитенә убылдырып, был шөғөлдө кәрәкһеҙгә әүерелдергән — йәшелсә, емеш-еләкте һатып алыу арзанырaҡҡа төшә башлаған. Электр энергияһы, транспорт сығымдары, һыу иҫ киткес ҡиммәт. Әйткәндәй, бында теләгән берәү теләгән ерҙә ҡоҙоҡ ҡаҙҙыра алмай — ер аҫты һыуҙары закон тарафынан һаҡлана, уны теләһә нисек файҙаланыу экология өсөн зыянлы тип табылған.

Баш ҡалаға килеп инәбеҙ. Тәүге көндә мин ултырған яҡтан күренмәгән икән: ҡаланы бүлеп аҡҡан Шпрее йылғаһы өҫтөнә ҡулға-ҡул тотоношҡан бейек кеше һындары ҡуйылған — ике Германияның ҡушылыуы айҡанлы иҫтәлеккә ҡоролған монумент, тип аңлатты Зоя.

Саҡырымдарға һуҙылып киткән Берлин диуары күп урында һүтеп алынған, ҡалған өлөшөндә абстракт плакаттар стилендәге һүрәттәр төшөрөп бөткәндәр. Унең аша көнбайыш секторға үтеп инергә теләүсе әллә күпме кеше атып үлтерелгәне күҙ алдына килһә, арҡа семерҙәп китә.

Бүлгеләнгән халҡым, беҙҙе әллә нисәгә айырған күҙгә күренмәҫ диуарҙар аҙмы ни! Улар емереләһе урынға бейегәйгәндән-бейегәйә, ҡалынайғандан-ҡалыная ғына бара төҫлө.

Китаптарҙан уҡып белгән Бранденбург ҡапҡаһына һанаулы минуттар эсендә барып еттек. Уның алдындағы майҙанда күпме совет һалдаты турап һалынған булған!

Рейхстаг... Артыҡ ҙур ҙа булмаған бина икән, әммә фашизмдың төп үҙәге булараҡ уны яулап алыу еңеүҙең һуңғы, ышаныслы нөктәһе сифатында баһаланған һәм күп һалдаттарыбыҙҙың ғүмеренә бәрәбәр иң аяныслы, түләр хаҡ менән иҫәпләшеп тормаҫлыҡ дәһшәтле алыш урынына әүерелгән. Ҡолағыма атыш тауыштары, алманса, урыҫса, башҡортса һәм башҡа күп телдәрҙә ҡысҡырышыу, командалар ишетелеп ҡалғандай була. Беҙ үрге ҡаттарға еңел генә атлап менәбеҙ, ә 1945-тең майында бындағы һәр баҫҡыста әллә күпме мәйет ятҡандыр.

Атыш тынғас, еңеү тантанаһы күкрәктәренә һыймай алҡынған һалдаттар Рейхстаг стенаһын сыпсыбар итеп ҡултамғаларға, күңелдәрендә дүрт йыл тиерлек йөрөткән әсе нәфрәт һүҙҙәренә күмеп ташлай. Хәҙер уларҙың фрагменттарын ғына ҡалдырғандар. Бер урында Закир тигән исем ап-асыҡ уҡыла. Ҡайтҡас яҡташтарыбыҙҙың исем-фамилияһын ентекләберәк эҙләр маҡсаттан булдыра алған тиклем тулыраҡ фотоға төшөрөп алдым.

Ҡыйыҡҡа күтәреләбеҙ. Ҡояш ауырттырып күҙҙе сағылдыра —

бында ул ап-аҡ икән. Рейхстаг көмбәҙен бик ҙур аҡсаға сит илгә һатҡандар, тиҙәр, яңыһын быялана н төҙөгәндәр. Киң билдәле картиналарҙан таныш Еңеү көнөндә ҡыҙыл әләм беркетелгән шпилдәрҙе төшөрөп алам.

Бынан Берлин панорамаһы асыла. Күҙ күреме ерҙә — иҫәбенә сыҡҡыһыҙ төҙөлөш крандары. Бер тарафта дирижабль күренә, баҡһаң, уларҙы төҙөлөш материалдары ташыу өсөн файҙаланалар икән. Күп ҡатлы бейек йорттар төҙөгәндә, автотранспорт менән ташырға яйһыҙ ҙур конструкцияларҙы килтерергә бигерәк тә уңайлылыр беҙҙә ҡулланылмаған был ысул.

Көңелдә еңеүселәр тоҡомонон хисе юҡ. Шул тиклем арзанайттылар ҡиммәт бирелгән Еңеүҙе...

Башҡортостан гербы төшөрөлгән штандартты Рейхстаг музейына бүләк итәбеҙ ҙә совет һалдаттарына арналған мемориалды ҡарарға юлланабыҙ. Трептов парк аша йәйәү генә китәбеҙ. Йыуан олонло ағастарҙан, сәскәле ҡыуаҡтарҙан, ямғырҙан һуң быу бөркөп ятҡан тупраҡтан хуш еҫ бөркөлә, сәнәғәте алға киткән, машиналары гөжләп торған ҡала уртаһында шундай тәбиғи урман булыуы ысшандырмай хатта. Әйтерһең, тыуған ауылым урманынан атлап барам. Һоҡланғыс, алман ҡалаларында өйрәктәре иркен йөҙөп йөрөгән күлдәр ҙә йыш осрай. Майсенға барған юлда күҙҙең яуын алып торған замок тирәләй йәйрәп ятҡан ҙур һәлмә күл хәтерҙә ҡалды: унда карп үрсетеп, көҙ байрам ваҡытында быуаны йыралар ҙа халыҡ рәхәтләнеп балыҡ тота, тип һөйләгәйне Зоя. Тәбиғәт, экология даими хәстәрлек үҙәгендә.

Юл ашаһынан амфитеатр рәүешлерәк итеп ҡоролған стела һәм уның ҡап уртаһында совет һалдатына ҡуйылған һәйкәл күренгәс, онотолоп алға уҡталдым. Светофорға күрһәтеп, туҡтаттылар.

Ағастар араһынан күренмәйерәк торған икән — ике яҡлап орудие һәм данлыҡлы Т-34 танкыһы ҡуйылған.

— Ҡарағыҙ әле, исемлектә минең олатайым да бар, — тигән тауышҡа боролоп ҡараһам, стеланың бер бүлкәте янында күҙ йәштәрен тыйып тота алмай Күмертау ҡалаһы башлығы Афонин Сергей Иванович баҫып тора. — Инициалдары ла, тыуған йылы ла тап килә. Уның Рейхстаг янында һуғыштың һуңғы көнөндә һәләк булғанын белә инем, тик исемлектә барҙыр тип уйламағайным...

Стела янында күмәкләп фотоға төшәбеҙ. Һуғыштың һуңғы көнөндә һәләк булған һалдаттың рухы янындаыҙҙа, үҙе ҡан ҡойған тупраҡҡа баҫып торған ейәненә шат булып осоп йөрөйҙөр кеүек тойолдо.

Милләттәштәребеҙгә, диндәштәребеҙгә ошонда килеп берәйһе ясин сыҡҡаны бармы икән? Рухтарығыҙ беҙгә рәнйемәһен, шәһиттәр! Йылдар яраларҙы уңалта, тиһәләр ҙә, уңалып бөтмәҫ, йөйө ҡалыр, ваҡытываҡыты менән асылып, йәнә ҡан һарҡый башлар — быуа әлеге, олатаһының мәңгелек йортон тапҡан ейән кисерештәре рәүешле... Бәхил булығыҙ!

Артабан Берлиндың элек сик булған үҙәк өлөшөнә алып барҙылар.

Көнсығыш һәм Көнбайыш Германиялар ҡушылғас, баш ҡала һайлау зарурлығы килеп тыуа. Оҙайлы бәхәстәрҙән һуң Берлинға өҫтөнлөк бирелә һәм унда ҡеүәтле төҙөлөш, үҙгәртеп ҡороуҙар башлана. Стеналары үтә күренеп торған мөһабәт йорттар комплексы урынында ГДР заманында бушлыҡ булған. Үтә күренмәле дөйөм ҡыйыҡ аҫтында ҡараһыу быяланан ҡыя мөйөшләп төҙөлгән был биналар халыҡтың ял итеү урыны итеп уйланылған — рестарандар, магазиндар, күңел асыу, ҡайһы бер көнкүреш хеҙмәттәре күрһәтеү төйәктәре һәммәһе бер урынға тупланған. Һауанан комплекс, моғайын, ҡатмарлы гигант сәскә тажы кеүек күренәләр.

Яңырыу, тыныслыҡ символы булып оҙаҡ быуаттар һаҡланһын был сәскә!

Хуш, Берлин.